МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ

Министерства образования и науки Республики Башкортостан

Администрация городского округа город
Нефтекамск Республики Башкортостан

Муниципальное общеобразовательное автономное учреждение
средняя общеобразовательная школа №11
городского округа город Нефтекамск Республики Башкортостан

РАССМОТРЕНО
на заседании ШМО
руководитель ШМО
учителей родных языков и
литературы,ИКБ и ОДНК НР

________________________

/И.Ф. Валиева/
Протокол №1 от 31.08. 2023г.

СОГЛАСОВАНО
Заместитель директора по
учебной работе
МОАУ СОШ №11

________________________

/Р.Р. Ямалтдинова/
31.08.2023г.

УТВЕРЖДАЮ
Директор МОАУ СОШ №11

________________________

/И.Г. Аллаяров/
Приказ № 634 от 31.08. 2023г.

МУНИЦИПАЛЬНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ АВТОНОМНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ СРЕДНЯЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА № 11 ГОРОДСКОГО ОКРУГА ГОРОД НЕФТЕКАМСК РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
Подписан: МУНИЦИПАЛЬНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ АВТОНОМНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ СРЕДНЯЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА № 11 ГОРОДСКОГО ОКРУГА ГОРОД НЕФТЕКАМСК РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
DN: C=RU, S=Республика Башкортостан, STREET="ул.Социалистическая, д.62 «В»", L=Нефтекамск, T=Директор, O=МУНИЦИПАЛЬНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ АВТОНОМНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ СРЕДНЯЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА № 11 ГОРОДСКОГО ОКРУГА ГОРОД НЕФТЕКАМСК РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН, OID.1.2.643.100.1=1030203260581, OID.1.2.643.100.3=12349054239, OID.1.2.643.100.4=0264012626, OID.1.2.643.3.131.1.1=021702149278, E=nur.aigul78@mail.ru, G=Илдар Габидович, SN=Аллаяров, CN=МУНИЦИПАЛЬНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ АВТОНОМНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ СРЕДНЯЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА № 11 ГОРОДСКОГО ОКРУГА ГОРОД НЕФТЕКАМСК РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
Основание: Я являюсь автором этого документа
Местоположение: место подписания
Дата: 2023-10-26 18:13:27
Foxit Reader Версия: 9.7.2

# КОНТРОЛЬНО-ОЦЕНОЧНЫЕ СРЕДСТВА

## по учебному предмету

## « Родной язык (башкирский)»

для обучающихся 4класса

**Нефтекамск 2023**

Аңлатма яҙыу

Туған(башҡорт) теленән контроль диктант яҙыу.

Контроль эшенең йөкмәткеһе һәм структураһы түбәндәге документтарға таянып төҙөлдө:

1. "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законы №273-ФЗ, 29.12.2012й.

2. Федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандартына (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 2022 йылдың 31 майында раҫланған 286-сы һанлы ҡарары.

3. Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының дөйөм белем биреү буйынса эшләүсе уҡытыусыларҙың уҡытыу предметы буйынса эш программаһының положениеһы 4. Нефтекама ҡалаһы 11-се мәктәптең муниципаль дөйөм автономия белем биреү учреждениеһының уҡыу планы.

5. “Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” законы (№1807, 25.10.1991й.).

6.“Башҡортостан республикаһы халыҡтары телдәре тураһында ” БР Законы (216 –З, 15.02.1999 й.)

7. Төп дөйөм белем биреүҙең төп белем биреү программаһы.

8. Дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡытыу рус телендә алып барылған 1-4 кластар өсөн (башҡорт теле һәм әҙәбиәте) уҡыу предметы буйынса дөйөм белем биреү өлгө программаһы.

9. Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы

**Контроль эшенең структураһы һәм үтәлеү вакыты**

Тикшереү эше 1 өлөштән тора.

Контроль эште башҡарыу өсөн 40 минут бирелә.

6. **Башҡорт теле буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим ителә.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

Диктанҡа билдә ҡуйғанда хаталарҙың характерына иғтибар ителә.. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупа: булмағандары, йәғни грамоталыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә.

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмағанға инә: ҡағиҙәнең иҫкәртмәһенә ҡараған хаталар, бәйләү юлы менән яһаған яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышында хаталар, бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу, үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышында хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана. “5” – тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктацион хата булған эшкә, “4”- 4 орфографик, 3 пунктацион, йә 1 орфографик, 6 пунктацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хатаһы булған эшкә лә “4” ҡуйырға мөмкин. “3” – 6 орфографик, 6 пунктацион, йә 3 орфографик, 9 пунктацион, йә 12 пунктацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктацион хаталы эшкә лә “3” ҡуйыла. “2”- 9 орфографик, 9 пунктацино йә 8 орфографик, 10 пунктацион хатаһы булған

эшкә ҡуйыла.. Хата һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә “1” билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Контроль диктант

| | |
|---|---|
| “5” | 1 орфографик,<br>2 пунктуацион |
| “4” | 1-2 орфографик,<br>2 -3 пунктуацион хата |
| “3” | 3-4 орфографик,<br>4-5 пунктуацион хата |
| “ 2” | 5 орфографик<br>4-6 пунктуацион хата |

**Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн**

**«5»** билдәһе төҙәтеүҙәр, бысратыуҙар булмаған, йә 2 пунктуацион хата булған эшкә, **«4»** билдәһе 3орфографик, 4 пунктуацион йә 2 орфографик, 5пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 6 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 4 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«3»**билдәһе 4 орфографик, 5 пунктуационйә 8 пунктуационхаталыэшкәҡуйыла. Әгәрэштәөсбертиптағы хата ебәрелһә, 2 орфографик, 4 пунктуационхаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«2»** билдәһе 6 орфографик, 8 пунктуацион йә 10 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Хаталар һаны 8 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр тексты күсереп яҙыуҙан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәкдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәкдим ителә:

**«5»** билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

**«4»** билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

**«3»** билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

**«2»** билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**Инеш контроль диктанты.**

**Тыуған ил.**

Тыуған илебеҙ бай һәм матур. Унда киң далалар һәм бейек тауҙар бар. Илемдә тәрән диңгеҙҙәр, күлдәр һәм йылғалар күп. Үҫемлектәр һәм ағастар үҫә. Төрлө ҡоштар һәм йәнлектәр йәшәй. Илебеҙ ҙур һәм матур! *(33 һүҙ.)*

Практик эш:

*1.Илебеҙ, далалар, диңгеҙҙәр, күлдәр, йылғалар* һүҙҙәрен ижектәргә бүлеге

**Контроль диктант**

**Көҙ етте.**

Һалҡын көҙ етте.Әсе ел ыжғыра.Беҙҙең йылға буйындағы ҡарт тирәктәр,ҡыуаҡлыҡтар яланғасланып ҡалды.

Аяҡ аҫтында ағастарҙан ҡойолған һары япраҡтар ҡыштырлай.Һыу өҫтөндә төрлө төҫтәге япраҡтар,ҡаҙ мамыҡтары аға.Йылға тынып ҡалған.Күпер өҫтөнән ҡарағнда, һыу төбө ялтырап күренеп ята.

**Йыллыҡ контроль диктанты.**

**Күбәләктәр.**

Йәй көнө хәтфә болонда төрлө күбәләктәр оса.Уларҙың ниндәйен генә күрмәйһең!Аҡ сәскәлә аҡ күбәләк ултыра.Зәңгәр сәскәнең һутын зәңгәр таплы күбәләк һура.Кесерткән күбәләге нәҡ кесерткән төҫлө. Күбәләктәр сәскә һутын һура.Улар тәбиғәткә йәм өҫтәй.